*Ринат КАМАЛ*



*Әҙибәләр. Прозабыҙ мадонналары. Уларҙы башҡорт әҙәбиәтең төҫө, биҙәге, прозабыҙҙың йөҙө, уның камилен билдәләүсе тип атарға булалыр. Беренсенән, мин әҙәбиәтте ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына бүлеү яғында түгелмен. Сөнки бар талантлы әҙибәләр, бар бушаҡ яҙыусы ирҙәр, бар уҡыусы күңелен яулаған ирҙәр, бар йонсотҡос стилле-интонациялы әҙибәләр... Донъя әҙәбиәтендә лә быға миҫалдар тулып ята... Шулай ҙа ниндәйҙер айырма ла бар кеүек ул әҙиптәр менән әҙибәләр араһында.*

*Икенсенән, әҙибәләр ҡатын-ҡыҙ психологияһын тәрәнерәк тоя, нескәрәк яҡтырта... Ә әҙиптәр ир күңелен ныҡыраҡ белә. Ҡатын-ҡыҙ ауылдағы хәл-әхүәлде ныҡыраҡ белә, күҙгә күренмәгән төпкөлдәге ағымдарҙы нескәрәк һиҙә. Ә ирҙәр эре ваҡиғаларға өҫтөнөрәк ҡарай, өҫтә ятҡанды ғына күрә. Эшкә тотонһа, осона сыҡмай ҡуймай... Шулай аҙна-ун көн ҡайнай ҙа шунан кинәт һыуына, донъяһын онота; инде шул эшкә әйләнеп тә ҡарамай. Ә ҡатын-ҡыҙ ваҡсыл, берәмтекләп эшләй, көн дә шул эшенән башын ҡалҡытмай — шулай аҙна буйы, ай буйы, йыл буйы. Түҙемлек бирһен уларға! Ирҙәр — кәйеф ҡоло! Шулай булғас, айырма бармы әллә юҡмы араларында?*

*Ни генә тимә, әҙибәләр ижады яңы осор башҡорт әҙәбиәтендә үҙенсәлекле күренеш. Гүзәл күренеш. Гүзәл әҙибәләребеҙ һәм күркәм әҙибәләр ижады бар беҙҙә! Әҙибәләр ижады, әҙибәләр әҙәбиәте тигәнем, белмәйем, хаҡмы икән? Әгәр, ысынлап та, былдай ил булһа, уның төҫө, булмышы ниндәй, тыны, һулышы, рухы ниндәйерәк?.. Ахырыһы, уныһын тел менән әйтеп бирергә беҙҙең, әҙиптәрҙең, теле зәғифтер, зиһене ярлылыр, зауыҡы һайҙыр. Тағы кеше аҡылы, зиһене, йөрәге, теле быны әйтеп, сағылдырып, тойҙороп бөтә аламы икән.*

*Шулай ҙа бар ул әҙибәләр донъяһы... Йәки әҙибәләр ижады. Һоҡланғыс улар — беҙҙең башҡорт әҙибәләре! Мәшһүр заттар, күркәм шәхестәр, батыр йөрәктәр! Беҙ, әҙиптәр, баш эйәбеҙ, һеҙҙең рух, һеҙҙең илһам, һеҙҙең йөрәк ялҡыны алдында! Һеҙҙең барлығығыҙ, һеҙҙең ижадығыҙ — ул халҡыбыҙҙың потенциаль көсөнөң, рухы, зиһене һәм күңеле бөйөклөгөнөң дә сағыу билдәһе. Һәҙиә, Зәйнәб, Мөкәрәмә, Мәрйәм, Таңсулпан, Гөлсирә, Фәниҙә, Фәрзәнә, Нажиә, Айһылыу... Һеҙ бик күп тә түгел, һеҙ танһыҡ, бик ҡәҙерле генә заттар, халҡыбыҙ, илебеҙ, телебеҙ өсөн!*

# БЕРЕНСЕ
## (Һәҙиә Дәүләтшина)

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһынан сыҡҡан тәүге яҙыусыларҙың береһе Һәҙиә Дәүләтшина ижады халҡыбыҙҙың ғорурлығына әүерелде. XX быуат уртаһынан бирле ул прозабыҙға, бөтә мәҙәниәткә ғәйәт ҙур йоғонто яһай.



«Ырғыҙ» романы — әҙәбиәтебеҙҙең йөҙөк ҡашы, уның иң оло ҡаҙаныштарының береһе — күп быуын уҡыусыларҙың яратҡан китабы. Үҙенең эпик ҡоласы, картиналылығы, һүрәтләү сараларының төрлөлөгө һәм тәбиғилеге менән был әҫәр башҡа халыҡтар күңелендә лә ихтирам яуланы. Һәҙиә Дәүләтшина шулай уҡ башҡорт әҙәби телен камиллаштырыусы ла, уны яңы баҫҡысҡа күтәреүсе лә. Уның әҫәрҙәренең телмәр ағышы башҡорттоң оҙон көйҙәре кеүек, ә китаптары битен асыуға, алдында башҡорт далалары йәйрәп киткәндәй...

Буласаҡ әҙибә үҙе лә далалар яғында — Ырғыҙ буйы башҡорттары араһында тыуып үҫкән, шул төбәктең рухын, телен, донъяһын үҙ ижадында сағылдырған. Әйтергә кәрәк, ижадсы яҙмышы тормош шарттарына, үҙ осорона, ул килтергән үҙгәрештәргә бәйле. Бәлки, нәҡ шул Совет власы урынлашыу арҡаһында ла башҡорт ҡыҙының йөҙө асылып, хоҡуҡтары раҫланып, күңеле, рухы ҡәләмгә тартылғандыр. Кем белә, бәлки, нәҡ яңы власть арҡаһында ла Һәҙиә Дәүләтшина прозаһы тыуғандыр?.. Бәлки, башҡорт әҙибәләре, ғөмүмән, әҙибәләр — Совет власы, яңы заман емештәре? Бында бәхәсләшергә мөмкин.

Дингә ҡараш үҙгәреү, яңыса уҡытыу, урыҫ мөхитенә ылығыу йәш комсомолка тормошонда, уның рухи үҫешендә эҙһеҙ үтмәй. 1920 йылда Һәҙиә Һамар ҡалаһында яңы ғына ойошторолған татар-башҡорт педагогия техникумына инә. Бер йылдан ире — буласаҡ күренекле дәүләт эшмәкәре һәм яҙыусы Ғөбәй Дәүләтшин менән Мәскәүгә күсеп китеү сәбәпле, был техникумды тамамлай алмай. Ваҡытлыса өҙөлгән уҡыуын 1924 йылда Өфөләге Башҡорт педагогия рабфағында дауам итә.

1926 йылдың мартында «Башҡортостан йәштәре» гәзитендә Һәҙиә Дәүләтшинаның тәүге хикәйәһе баҫылып сыға. 1931 йылда «Айбикә» тигән повесын, ә киләһе йылына «Башаҡтар тулҡыны» повесын нәшер итә. 1934 йылда әҙибә СССР яҙыусыларының I съезында делегат булып ҡатнаша, унда Максим Горький менән күрешеп һөйләшә. 1935 йылда инде уның «Хикәйәләр шәлкеме» исемле тәүге китабы донъя күрә. Шул уҡ йылда яҙылған «Һырға һабағы» исемле хикәйәлә ҡатын-ҡыҙҙар тормошон, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен үҙенсәлекле һүрәтләүе менән уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Ошо ваҡытта Мәскәүҙәге китап нәшриәттәре өсөн мөхәррирҙәр әҙерләү институтында уҡый башлай, әммә, Баймаҡҡа «Йылайыр» совхозы гәзитенә эшкә ҡайтыу арҡаһында, уны ла ослай алмай.

Әлбиттә, беренсе башҡорт әҙибәһенең иң төп әҫәре — «Ырғыҙ» романы. Киң ҡоласлы эпик әҫәр. Дарьяларҙы айҡар ҡоласлы, башҡорт оҙон көйөләй киң һулышлы был әҫәр бик ауыр шарттарҙа тыуа. 1937 йылда ире Ғөбәй нахаҡҡа хөкөм ителгәс, әҙибә лә төрлө йәберләүҙәргә, ситләтеүҙәргә дусар — һөргөндә була, тыуған Башҡортостанына ла 1942 йылда ғына әйләнеп ҡайта. Бөрөлә йәшәй, ең һыҙғанып «Ырғыҙ» өҫтөндә эшләй. Романдың күп өлөшөн, яҙырға мөмкинселеге булмағанда, әхирәттәренә тарих итеп һөйләй — шулай хәтерендә тота, шулай ижад итә. Ул — сәсәниә лә, әҙибә лә.

Һәҙиә Дәүләтшинаның үҙенең аҡҡош йыры — «Ырғыҙ» романын яҙып бөтөүө, ысынлап та, ижади ҡаһарманлыҡҡа тиң. Ғөмүмән, ул — беренсе әҙибә, беренсе романсы, беренсе шундай аҫыл проза әйбере яҙыусы... Ә теле һуң? Һаумал ҡымыҙҙай боҫрап тора, башҡорт оҙон көйөләй оҙон тынлы, тигеҙ ағышлы, дала елеләй еләҫ, ҡолаҡҡа ятышлы моңло... Нисә быуын әҙиптәр өсөн Һәҙиә теле беренсе эталон, Һәҙиә романы жанр этолоны бул-

ды! Беренсе әҙибәбеҙҙең башҡорт әҙәбиәтенең генә түгел, бөтә Шәреҡ донъяһының иң беренсе романдарының береһен ижад итеүе, уның да шундай юғары художестволы кимәлдә (күп йылдар прозабыҙҙа эталон дәрәжәһендә йөрөүө) булыуы иҫ-аҡыл юйғыс, һоҡланғыс вә мәртәбәле бер күренеш бит! Был, бәлки, донъя әҙәбиәтендә лә үтә лә һирәк күренештәрҙең береһелер әле...

«Ырғыҙ» романы — Һәҙиә Дәүләтшинаның иң төп әҫәре, ғүмерлек эше, ул халыҡ ҡыҙының тыуған халҡына бүләк иткән аҫыл бер һәҙиәһе.

# ХАЛЫҠ МӨХӘББӘТЕ
## (Зәйнәб Биишева)

Халыҡ күңеле — көмөш шишмә бит ул,
Үлемһеҙ ул һаҡлай сафлыҡты;
Кисермәй ул хатта алланы ла,
Ситләп үтмәк булһа хаҡлыҡты.

Зәйнәб Биишеваның ижады тураһында уйланғанда, күңелдә «әҙибәгә халыҡ мөхәббәтенең сере ниҙә» тигән һорау тыуа.



Бәлки, әҙип һәм ғалим Тимерғәли Килмөхәмәтов әйтмешләй, Зәйнәб Биишеваның Шәреҡ ҡатын-ҡыҙҙары араһында тәүләп «Яҡтыға» трилогияһын яҙыуындалыр?.. Улай тиһәң, быны уҡыусы уйлап-иҫләп торамы? Романдарҙың да төрлөһө була... Шәп яҙған бөтә әҙиптәргә лә халыҡ шулай мөкиббән китәме?

Бәлки, Назар Нәжми раҫлауынса, таланттың үҙ кәҙерен иң тәүҙә үҙе белеүендәлер? М.Горький ҡабатлауынса, әгәр кеше үҙен-үҙе ҡайғыртмай икән, кем ҡайғыртыр?.. Ләкин беҙҙең арала үҙ-үҙен генә ҡайғыртҡан, баһалаған таланттарҙың, йәки шәхестәрҙең бөтәһен дә халыҡ үҙ итеп бөтәме? Зәйнәб Биишеваға халҡыбыҙ мөхәббәтенең сере ниҙә? Әҙибә ижады тураһында фекер төйнәп, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов менән Абдулхаҡ Игебаевтар ҙа, артистар Әнисә Яхина менән Әхтәм Абушахмановтарҙың да үҙҙәренсә фараз ҡылғандары бар... Уларса, әҙибәгә ҡыйыулыҡ, тел үткерлеге, рухлылыҡ, халыҡ тойғоһо, дәртсәм хас ине. Ул мөләйем дә, итәғәтле лә ине, шул уҡ ваҡытта хаслыҡты йөҙгә бәреп әйтте, ғәҙелһеҙлекте, төҫөнә, авторына, уның дәрәжәһенә ҡарамай, фашланы.

Маҡтауҙар ҙур итә алмаҫ,—
Хеҙмәтең ҙур булмаһа,
Хурлауҙар хур итә алмаҫ,—
Халҡың һөйөп ҙурлаһа...

Бәлки, әҙибә, үҙе нарыҡлауынса, илдең ҙурлауы илгә тоғролоҡта, намыҫлы хеҙмәттәлер?.. Бәлки, эсең тулы ут булһа ла, «илап тыуһам да мин, йырлап үҫтем, йырлап йәшәйем мин бөгөн дә» тәлер? Әҙибә лә заманында, билен биштән быуып, эшләне лә, ижад та итте, өс ир баланы ла тәрбиәләне... Бәлки, күренекле телсебеҙ Нәжибә Мәҡсүтова иҫбатлауынса, был ҙурлыҡтың башы халыҡтың иң мөҡәддәс хазинаһын — тел байлығын халыҡтың үҙенә кире ҡайтарып бирә алыуҙалыр? Башҡорт халыҡ теленең һаумал ҡымыҙҙай тәндәргә, йәндәргә сихәт биреүсе аһәңе бар бит Биишева әҫәрҙәрендә... Был хаҡта әйтелгәне бар, тағы ҡабатларға мөмкин, ҡабатлауҙан иман иҫкермәй: күгәрсендәр — ҡыуаҡандарҙың мамыҡтай йомшаҡ, еләҫ елдәй яғымлы телендә һөйләне ул. Ана шул наҙлы ла,ҡош һайрауылай моңло ла, ҡыҙҙар өнөләй ҡолаҡтарҙы иркәләгес тә телдә яҙҙы романсы ...

Бәлки, шағир Ҡәҙим Аралбай ҡабатлауынса, Зәйнәб Биишеваға халыҡ мөхәббәтенең тамырҙары уның йәнә шағир ҙа, драматург та, йәнә матур публицист та булыуындалыр?.. Бәлки, уның китаптарының башҡорт илендә том-том булып сығыуындалыр? Ниндәй яҙыусының китаптары беҙҙә шулай тираж-тираж сыҡҡаны бар? Бәлки, был «тираж» үҙе үк халыҡ мөхәббәтенең сағылышылыр? Халҡыбыҙ Зәйнәб Биишева китаптарын ҡулдан төшөрмәй уҡый, Зәйнәб Биишеваны, Зәйнәб Биишева ижадын үҙенеке һанай — был хәҡиҡәт! Бәлки, был мөхәббәт шишмәһенең башы һүҙ оҫтаһының халҡы менән бергә булыуында, халҡы кеүек үк йәшәүендәлер? Аҙ һанлы халыҡтың бөгөн күп һанлылар араһында ҡағылып-һуғылыуҙан, әҙибә

йөҙөндә үҙенә ниндәйҙер рухи таяныс, раҫланыш эҙләүендәлер! Үҙ әҫәрҙәрендә милләттәштәренең аһ-зарын, теләк-ынтылыштарын, уй-хистәрен мөмкин тиклем тулы сағылдырыуындалыр?.. Башҡорт теленең аһәңен, һутын шулай тулы биреүендәлер, башҡорттоң эстетикаһын, фәлсәфәһен, психологияһын, этикаһын шулай һирәк заттарса яҡтырта алыуындалыр? Бәлки, әҙибәнең үҙ заманы, уның шәхестәре менән бәхәсләшеп йәшәүендәлер?

Әҙибәгә ҡарата халыҡ мөхәббәтенең сере ниҙә?..

## ОЛО ЙЫЛҒА
### *(Мөкәрәмә Садиҡова)*

Йылдар үткән һайын ул баҫалҡылана. Уйҙары етдиләнә, кисерештәре тәрәнәйә...

Оло йылғалар ҙа шулай бит. Юлдары кескәй, йырлы шишмәләрҙән баш ала. Дәртле, сәмле шишмәләр йәйләп мул һыулы, тәрән йылғаларға әүерелә.



Яҙыусы Мөкәрәмә Садиҡованың моңауаздары ла төрләнә, ижад емештәре һәлмәкләнә. Әҙибә инде тормош, йәшәйеш тураһында тәрәнерәк уйлана, донъяның хәүефхәтәрҙәрен нығыраҡ тоя. Ошо кисерештәр һөҙөмтәһендә уның бихисап күркәм хикәйәләре, баҙыҡ повестары донъя күрҙе. «Таныштар» (1959 йыл), «Йондоҙ һәм сәскәләр» (1963), «Алтынтауҙағы ант» (1975), «Сәмреғош ҡанат ҡаға» (1979), «Үрҙәргә артылғанда» (1981), «Юл төшкәс» (1986) — бөтәһен дә һанап сығыу мөмкинме ни? Иң мөһиме, М.Садиҡова был әҫәрҙәрендә үҙен етди прозаик итеп танытты.

«Сәмреғош ҡанат ҡаға» повесы, әйтергә яраһа, яҙыусының иң ихлас, иң сағыу әҫәрҙәренең береһе. Әҙибә бында иң элек халыҡсанлыҡҡа өлгәшә алған, халҡының йәшәйеш рухын күрһәткән, йәки үҙ «Садиҡова донъяһы»н асҡан.

Әҫәрҙең төп героиняһы Зөбәржәт сабый саҡта әсәһенең Сәмреғош тураһындағы экиәтен тыңлай. Аҡъял батыр юлдаштарының хаслығы арҡаһында төпһөҙ мәмерйә эсенә ҡолай. Ошо ят донъя эсенән уны изге ҡош Сәмреғош ҡотҡара. Азатлыҡҡа һыуһаған йәнгә ул ирек бүләк итә, ул уға яҡты көн нурын күрһәтә... Зөбәржәтбала ҡасан да бер ошо илаһи ҡошто осратырға теләй. Ул теләк яйлап уның хыялына, ғүмере маҡсатына әйләнә.

Ҡағылып-һуғылып, үгәй әсәләрҙең береһенән икенсеһе ҡулына күскән йәтимә ҡасан да бер аяҡҡа баҫырға, үҙ иркен яуларға, бәхетле булырға тейеш. Ул быға хаҡлы! Ергә килгән һәр әҙәм заты, улай ғына ла түгел, һәр йән эйәһе бәхеткә, әҙәмсә тормошҡа хоҡуҡлы. Кеше бәхет өсөн, йән эйәләре йәшәү өсөн тыуа...

Зөбәржәттең ата-әсәһе ғүмер баҡый хәлле кешеләргә бил бөккән, артабан колхоз тип янған. Шулай ҙа улар һаман мандып китә алмай. Һаман да бәхетле, яҡты ал таң атмай. Өҫтәүенә, әсәһе, бисара йән Бибисара иртә вафат булып ҡуя. Атайһыҙ йәтим — ярты йәтим, әсәйһеҙ йәтим — үкһеҙ йәтим. Ҡыҙыу холоҡло атай ҙа, алмашынып торған үгәй әсәйҙәр ҙә әсәне — изге йәнде — алмаштыра алмай...

Кем белә, бәлки, сабыйҙың Сәмреғошо әсәһе Бибисара үҙе булғандыр, әсә ҡыҙына үҙе хаҡындағы экиәтте бәйән ҡылғандыр? Зөбәржәт үҙ Сәмреғошонан яҙа. Уны кем алмаштырырға тейеш? Яңы Совет власы, яңы мәктәп, яңы ҡоролош! Ысынлап та, йәш илдең йәш балаһын йәш ил үҙ ҡосағына ала, үҙенсә тәрбиәләй, аяҡҡа баҫтыра, кеше итә.

Әҙибә повеста үҙ героиняһының шәхесе формалашыуын, ҡараштары нығыныуын күҙәтә. Әҙибә геройын иң тәүҙә халыҡ эстетикаһы, ауыл мөхите нигеҙендә тәрбиәләй. Шул уҡ ваҡытта был баланың күңеле партия идеологияһы менән һуғарыласағына шик юҡ. Әммә был уны халҡынан айырмаҫ.

Форма яғынан әҫәр Зөбәржәттең үҙ Сәмреғошон, үҙ бәхетен, үҙ азатлығын эҙләүгә ҡоролған. Зөбәржәт үгәй әсәләр иҙеүенән, хәйерселектән ҡотолорға, ниһайәт, бөтә буйына турайып баҫырға, әҙәм булырға ынтыла. Шәхес

формалашыуы оҙайлы процесс, әҫәрҙә бихисап ваҡиғалар теҙелеп киткән. Прозаик уларҙы нәҡ ошо бәхет эҙләү алымы менән бер-береһенә бәйләй алған. Ғәҙәттә былдай күп ваҡиғаларҙы бер-береһенә теҙеү, унан йыйнаҡ сюжет ҡороуы бик ҡыйын. Бәхеткә ҡаршы, автор уңышҡа ирешкән: йыйнаҡ, бер ынтылыш менән һуғарылған әҫәр тыуҙырған. Һәр главаның башында йә һуңында әҙибә (хикәйәләүсе —Зөбәржәт) Сәмреғошто — үҙен бәхетле итәсәк ҡошто иҫләй. Теге йәки был бәләгә тарығанда ҡапылдан ошо ҡош пәйҙә булыр ҙа уны ҡотҡарыр кеүек!

Хыял, илаһи хыял! Ул бала күңелендә йәшәй. Уны ҡанатлы, көслө итә.

Шуныһы ғәжәп: яҙыусы таныш темаһын, өйрәнгән мөхите хаҡындағы ваҡиғаларҙы әҫәрҙән-әҫәргә, бәғзе берәүҙәр ише китаптан-китапҡа һуҙмай. Берәү булһа, бала саҡ хәтирәләре хаҡында тотош шәлкем (повестар шәлкеме) яҙыр ине. Мөкәрәмә Садиҡова ғәҙәттә үҙен-үҙе ҡабатламай. Һәр әҫәрен, үҙе әйтмешләй, яңы остан башларға, илһамының һәр талпынышында яңы буяуҙар табырға тырыша. Һәр китабының темаһы ла, һүрәтләү мөхите лә, фекерҙәре лә яңы, бүтән була. Мәҫәлән, «Алтынтауҙағы ант» йәш йөрәктәрҙең мөхәббәтенә, ә «Үрҙәргә артылғанда» повесы, «Гөлгөнәм-бергенәм» драмаһы әхләҡ мәсьәләләренә, әҙәп темаһына арналған. Уларҙың һәр береһенә айырымлап-тәфсилләп туҡталып китеү зарурлығы юҡ. Шуға «Сәмреғош ҡанат ҡаға» тураһындағы һүҙҙе генә дауам итке килә. Хәйер, был һүҙ әҫәр хаҡында ла түгел, ә әҙибәнең ижады, уның ижад сығанаҡтары — Алтынтау шишмәләре тураһында.

Яңыраҡ яҙыусының тыуған яҡтарында булырға, уның бала саҡ шишмәләренән ауыҙ итергә тура килде. Мөкәрәмә Садиҡованың ижады әҙәби түңәрәктәрҙә, Әҙәбиәт институтында түгел, ә Йәрмәкәйҙә, Алтынтау битләүҙәрендә башланған икән. «Сәмреғош ҡанат ҡаға» ошонда тыуа. Әйткәндәй, йәрмәкәйҙәр китаптың күп прототиптарын әле һаман да яҡшы иҫләй, хатта күреп белә. Повесть геройҙары ошонда көн иткән, ошонда танылған, бәхет өсөн көрәшкән.

Буласаҡ әҙибә үгәй әсәләре, туғантыумасалары ҡулында үҫә. Хәс тә «Сәмреғош ҡанат ҡаға» повесындағыса... Шунан Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Атаһы фронтҡа китә. Мөкәрәмә балалар йортонда тәрбиәләнә, Бәләбәй училищеһында уҡырға хыяллана. Ләкин яҙмыш уны Өфө ҡалаһына илтә. Бында тәүҙә ағас эшкәртеү заводында эшләй. Һуңынан театр училищеһында, Әҙәбиәт институтында уҡый.

Етегән шишмәләрҙә ете улаҡ,
Сылтыр-сылтыр аға көмөш һыу;
Беҙ китәбеҙ инде, һеҙ ҡалаһығыҙ —
Шул саҡтарҙа бигерәк яманһыу.

Йәрмәкәйҙә «нәҡ беҙҙең шишмәләр хаҡында татар әҙибе Ғүмәр Бәширов «Етегән шишмә» йырын яҙған» тип һөйләйҙәр. Булыр. Йәрмәкәйҙәге Алтынтау шишмәләре тураһында шиғыр яҙмау хилафлыҡ булыр ине. Мөкәрәмә Садиҡова бына уның кешеләре хаҡында яҙҙы. Ошо кескәй шишмәләрҙән башланған ижад юлы уны оло һыуҙарға илтте. Әҙибә Мәскәүҙә уҡып ҡайтҡандан һуң «Башҡортостан пионеры» гәзитендә, Башҡортостан Яҙыусылар союзында эшләне. Бер-бер артлы китаптары — ижад емештәре донъя күрә торҙо. 1962 йылда Сиҙәм театры (хәҙерге Сибай театры) уның «Бәхет эҙләгәндә» тигән драмаһын сәхнәгә ҡуйҙы. Аҙаҡ «Ерән сәс», «Был йөрәккә ни кәрәк?», «Гөлгөнәм-бергенәм» драма әҫәрҙәре тыуҙы. Уларҙы Башҡортостан менән Татарстан дәүләт театрҙары сәхнәләштерҙе. Беҙ Йәрмәкәйҙә булған көндәрҙә һәүәҫкәр артистар яҡташтарының яңы «Аҙашма юлдарымда» драмаһын әҙерләп ята ине. Ауылдаштар быға бик һөйөнгән. Ошо тыуған төбәктәрҙән башланған ижад юлы, эҙләнеүҙәр осоро дауам итә. Алтынтау шишмәләре тынмай сылтырай, йүгереп-талпынып алҡын иҙелгә — Ағиҙелебеҙгә ашҡына.

...Уйлап ҡараһаң, ҡыҙыҡ ҡына бит. Заманында Мөкәрәмә Садиҡова әҙәбиәтебеҙҙәге бер-нисә бөртөк кенә ҡатын-ҡыҙ әҙибәләребеҙҙең береһе ине. Башҡорт прозаһы йөгөн ирҙәр менән бер ҡатарҙан тороп тартты. Тормошта ҡатын-ҡыҙҙың хәстәрлектәре, мәшәҡәттәре былай ҙа етерлек. Өҫтәүенә, улар ижад итә. Ҡатын-ҡыҙ әҙибәләрҙең тормош мәшәҡәттәре, ығы-зығы эсендә юғалып ҡалмауы үҙе үк оло батырлыҡ!

Ғөмүмән, Мөкәрәмә Садиҡованы бөгөн әҙәбиәтебеҙҙә бер кем менән дә бутап булмай. Уның китаптарын еңелелпе әйберҙәр менән сағыштырыу йә ижадын өнһөҙ килеш урап үтеү бөтөнләй мөмкин түгел.

... Йылдар уҙған һайын ул олпатлана, ижад емештәре теҙелгән тәлгәше һәлмәкләнә. Моң-ауаздары төрләнә, йәшәйеш тураһында ыҙалыраҡ, хафалыраҡ итеп уйлана.

Оло, мул һыулы йылғалар ҙа шулай бит.

## ЮЛ БАШЛАУСЫ
### *(Таңсулпан Ғарипова)*

Таңсулпан Ғарипова. Уны бөгөн башҡорт әҙибәләренең өндәүсеһе, ниндәйҙер кимәлдә юл башлаусыһы тип атарға булалыр. Һәҙиә, Зәйнәбтәр ҡулындағы әләмде ул күтәреп алды... «Өйөрөлә күктә яңғыҙ бөркөт», «Ай менән ҡояш бер генә», «Принц Датский», «Умырзая гөлдөң ғүмеркәйе», бигерәк тә «Мөңрәй-мөйрәй килә Бөйрәкәй» романы — әҙибәне ана шул әҫәрҙәр алғы һыҙыҡҡа сығарҙы, әйҙәүсе тигән оло бурыс йөкмәтте. Фольклорҙан килгән, Һәҙиәләр, Зәйнәбтәр башлаған традициялар ғүмерле булды, бәрәкәтле тупраҡҡа төштө... Һәҙиә Дәүләтшина менән Зәйнәб Биишевалағы эпик ҡоласлыҡ, хикәйәләүҙең талғын, тигеҙ ағышы бөгөнгө әҙибәләребеҙ ижадында дауам иттерелде, телебеҙҙең шиғрәнә матурлығы, һуты уларҙа артабан үҫтерелде, сюжет ҡоролошо, формаһы тағы ла камиллаша төштө тип әйтә алабыҙ.

Таңсулпан Ғарипова әҙәрҙәренең бигерәк тә шиғрәнә теле һәм символикаға ҡоролоуы уҡыусы иғтибарын үҙенә йәлеп итә. Гәрсә ул — яңы замана балаһы, Һәҙиә Дәүләтшиналағы эпиклыҡ, монументаллек менән артыҡ мауыҡмай ҙа. Заман башҡа — заң башҡа. Бөгөнгө уҡыусы, бөгөнгө проза эпиклыҡты бик үк үҙһенеп тә бармай кеүек, минеңсә. Һәр хәлдә, был яҡшы, йәки хөрт, тип әйтмәйем. Хәҙер проза заман менән бергә үҙгәрә: мәҫәлән, тел йәһәтенән генә алғанда ла, бөгөнгө прозаиктар Һәҙиәсә «тәмләп, һуҙып», ҡатмарлы һөйләм конструкциялары менән яҙмай... Был һүҙ ыңғайында булды. Был, бәлки, замандың тиҙлеге, ритм һәм һүрәтләү ысулы үҙгәреүе менән бәйлелер.

«Ай менән ҡояш бер генә» повесында Ай үҙаллы персонаж, автор уны бала табыусы ҡатын менән дә, тыуасаҡ бала менән дә сағыштыра: «Ошо саҡ нәҡ ҡыҙарып ҡына тулған йәш ай үҙе балам кеүек: үрелеп кенә алып, шуның яланғас, ыуыҙ ғына тәнен йөрәгенә баҫ ине»... Автор ҡояш менән дә, тегене тере йән күреп, һөйләшә... Ғәлиәнең йәдкәре — тәңкәләр ҙә бер бетеү, яҙмыш юраусы, имеш. Әгәр шул тәңкә (килен туйында бүләк ителгән иҫтәлек) ҡарайһа, бүләк биреүсенең яҙмышы ла уңмай ҡуя, ти.



Ғөмүмән, ай-йондоҙҙар — Таңсулпан донъяһының яратҡан образдары («Ҡатындың бүртеп торған дымлы ирендәрендә, киң асылған күҙҙәрендә ынйы-йондоҙҙар ем-ем килеп бейей төҫлө»). Әҙибәнең теле һутлы, эйе, образлы-картиналы. Ул тәбиғәтте һүрәтләгәндә лә, кеше күңелен тасуирлағанда ла тыуған Баймаҡ яғының бай рухи хазинаһын файҙалана. Йәки халыҡтыҡын халыҡҡа кире ҡайтарып бирә — телдә йәшәгәнде аҡ ҡағыҙ битенә күсереп мәңгеләштерә. Таңсулпанды прозалағы шағирә тип атарға мөмкиндер. Ғөмүмән, ысын проза — шиғриәт бит ул. Йәки сәнғәт!.. Әҙәбиәт үҙе сәнғәт емеше, йәнә шиғриәт менән сәнғәтте бында синонимдар тип аңларға кәрәктер.

Әлбиттә, «Мөңрәй-мөңрәй килә Бөйрәкәй» романы — әҙибәнең төп китабы, башҡорт прозаһының һуңғы йылдарҙағы ҙур ҡаҙанышы булды. Бында ла Бөйрәкәй-һыйыр — тормош, муллыҡ символы. Бөйрәкәй тере икән, бихисап юғалтыуҙарға, ҡайғы-хәсрәткә, яҙмыштар ҡыйралыуына ҡарамай, тормош дауам итә. Был — әҫәр тыуҙырған төп фекерҙәрҙең береһе.

Күк бүре йәнә бер сағыу символ. Ихсанбай Күк бүрене баҙарҙан көсөк көйө һатып алып ҡайта. Эт тип йөрөгәне, урманда ата бүреләр менән ҡарығып, бала таба. Өҫтәүенә, ике сабыйҙы тамаҡлай. Шунан ата бүрегә эйәреп, көсөктәрен эйәртеп, ауылдан сығып китә Күк бүре... Ихсанбайҙар ҙа ят ауылға ситтән ҡасып килә. Улар ҙа

бүре... Был ауылдағы кешеләргә бөтмәҫ-төкәнмәҫ хәсрәт килтереп сығып китәләр... Автор бүреләр яҙмышын Ихсанбайҙар ғаиләһе яҙмышы менән сағыштыра... Сағыу символдар менән эш итә... Символдар, ғөмүмән, образлылыҡ тыуҙырыу сараһы, һүрәтләүҙең бер алымы. Эйе, Таңсулпан Ғарипованың был өлкәлә матур-матур табыштары бар. Шул уҡ «Бөйрәкәй»ҙә Гөлбаныу образын алайыҡ (авторҙың ым-ишаралар, символдар менән эш итеүенә тағы туҡталайыҡ). Ауыл активистарынан һыбай ҡасҡан саҡта сабый Ихсанбай Диңгеҙханда,ә Күкһылыу—Гөлбаныу Барсынһылыу ҡосағында була. Ҡыуалаусылар үксәгә баҫып килгәс, Диңгеҙхан сабый ҡыҙҙы ташларға бойора... Күкһылыу—Гөлбаныу — ташландыҡ бала; ғүмере эт типкеһендә үтә. Уға ата-әсәһе баштан уҡ шундай яҙмыш юрай, һәм шул юрау ысынға сыға... Шуныһы хәтәр: бер туған Ихсанбай арҡаһында Күкһылыу—Гөлбаныу һәләкәткә осрай... Әҙибә (бәхетле!) трагик коллизия таба алған, шуға был әҫәрҙең уҡыусыға тәьҫир көсө ҙур.

Әйткәндәй, роман композицион яҡтан да, телмәре-тасуирлауы менән дә йыйнаҡ. «Бөйрәкәй» хикәйә кеүек тығыҙ, аһәңле яҙылған. Һүҙгә — тығыҙ, фекере — даръялай.

Сибәғәт—Диңгеҙхан менән Фәүзиә—Барсынһылыу яҙмышы әҫәрҙе драматик итһә, уҡыусыны тетрәнергә мәжбүр итһә, Диңгеҙхандар заманы менән Гөлбаныуҙар заманын йәнәш, сағыштырып һүрәтләү (ике заман ҡатламы) хикәйәләүҙе тағы ла көсөргәнешле, картиналы яһай. Был үҙ сиратында заман, сәйәси ҡоролоштар, бәндә яҙмыштары хаҡында авторға тәрәнерәк фекер йөрөтөргә булышлыҡ итә.

Тағы өсөнсө ваҡыт ҡатламы ла бар: ул Гөлбаныуҙың ҡыҙы Мәҙинә заманы... Фәүзиә — Гөлбаныу — Мәҙинә сылбыры... Өс заманды һүрәтләй, өс быуын яҙмышын үҙ эсенә ала роман. Был уны (күләме менән бәләкәй булһа ла) ҡатмарлы ҡоролошло, етди уйланыуҙар емеше итешә, әҫәрҙең эпик ҡоласын, мәртәбә-дәрәжәһен билдәләй. Ғөмүмән, роман жанрына тормошто киң планда (бер нисә ҡатлампланда, бер нисә сюжет һыҙығында) тасуирлау хас. Ғәҙәттә бында һүҙ айырым образдар яҙмышын һүрәтләүҙән халыҡ яҙмышын байҡауғаса олғаша... Таңсулпан Ғарипова ла «Бөйрәкәй»ҙә, теләйме-теләмәйме, Октябрь революцияһы, аҡтар-ҡыҙылдар хәрәкәте тураһында уйланырға мәжбүр... Диңгеҙхан менән Барсынһылыу ҙа (улар Күк бүре ғаиләһе менән сағыштырылһа ла) — замананың ҡорбаны бит, заман хаталары уларҙың тыныс тормошон да зил-зибәр килтерә. Шуға Фәүзиә—Барсынһылыу кешеләр, күршеләр алдында шәүлә йәки гонаһ шомлоғо һымаҡ кәүҙәләнә. Шәңгәрәй ҙә символик образ. Бик тә үҙенсәлекле персонаж. Донъя әҙәбиәтендәге диуана образдары затынан... Шәңгәрәйҙең һүҙҙәре («Ай тотолған төндә»ге Диуананыҡы ише) киләсәктәге ваҡиғаларға им-ишара, алдағы яҙмыш-күрәсәккә асҡыс.

Таңсулпан маһир хикәйәсе ине, хәҙер үҙен роман, хатта драма жанрында ла ярайһы уҡ танытып өлгөрҙө. «Төштәге йыр», «Бәхеткә ҡасҡандар», «Ямғыр көткәндә» исемле пьесалары Сибай, Стәрлетамаҡ драма театрҙарында сәхнәләштерелде. Драма һәм проза формаһы менән ҡапма-ҡаршы төрҙәр тиһәң дә була, — бынан сығып, Таңсулпан төрлө юҫыҡта ла ижад итеү ҡеүәһенә эйә художник, тип билдәләй алабыҙ.

Шундай әҙибәләре, батыр ҙа, матур ҙа, оһолло ла вәкилдәре булған бөгөнгө башҡорт прозаһы киләсәкһеҙ була тиме ни инде! Ир ижадсылары булдыра алмағанды әҙибәләр булдыра, ирҙәр ҡырылып бөткәндә, йә илен яҡлай алмағанда, ил инәләре күтәрелә... Юҡ, телебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе, прозабыҙҙы кәмһетергә юл ҡуймаҫ бөгөнгө башҡорт әҙибәләре!

## *ТАЛАНТ БИЛДӘҺЕ*
### *(Гөлсирә Ғиззәтуллина)*

Гөлсирә Ғайсарова—Ғиззәтуллина менән бергә уҡыныҡ, бергә «Шоңҡар» түңәрәгенә йөрөнөк. Әле лә иҫтә: «Шоңҡар»ҙа Гөлсирәнең хикәйәһен тикшерҙек. Романтик әйбер. 70-се йылдарҙа!.. Телһеҙ ҡыҙҙың хыялый мөхәббәте, бурандамы, ҡойма ямғырҙамы аҙашыуы... Мин, был романтизм алымы менән яҙылған хикәйә, тинем, Гөлсирәнең әхирәттәре ҡаршы сыҡты. Ул заманда романтизм йә импрессионизм ысулы менән яҙыу хилаф эш һанала ине шул. Хатта тәнҡитле реализмды фай-

ҙаланырға ярамай — соцреализм алымынан тайпылма!

Аҙаҡ Гөлсирә күп хикәйәләр баҫтырҙы (башлыса ул хикәйәсе), тик нишләптер уның күп әйберҙәре миңә оҡшап етмәне, дөрөҫөрәге, таң ҡалдырманы. Ә теге романтик хикәйәһе күңелемә бик тә хуш килгәйне, авторға бик тә ҙур өмөттәр бағлатҡайны.

Гөлсирә хикәйәләрендәге ир менән бисәнең «ялҡытҡыс» мөнәсәбәттәрендәге соҡсоноуҙар, баналь тип әйтәйемме, мөнәсәбәттәр, картиналар миңә «етлегеп етмәгәнлек» билдәһе һымағыраҡ тойолдо. Йәки шул «төҫһөҙ, ялҡыт-ҡыс» тормош күренештәре художестволыҡҡа дәғүә итмәй йәки әле сәнғәт күренеше булып етмәгән кеүек ине... Һәм «Күңел йорто» повесы! Нисә йылдан һуң мин, нисә йәшемә етеп, һабаҡташымды ҡабат астым, саҡ, минеңсә, ул үҙен асты, тапты! Ниһайәт донъяға Гөлсирә Ғиззәтуллина атлы үҙенсәлекле художник тыуҙы! Ул да прозалағы шағирә (йәки уның да прозаһы ысын шиғриәт йәки сәнғәт емеше), ул да халҡыбыҙҙың бай тел шишмәһенән беҙгә һут «һемертә», әйтергә кәрәк, бүтәндәргә ҡарағанда көслөрәк, нығыраҡ, тиәйемме, халҡыбыҙҙың әхлағын, эстетикаһын, фәлсәфәһен һеңдерә... Ғөмүмән, ысын художниктарға хас булғанса, Гөлсирә шағирә лә, психолог та, йәнә фәлсәфәсе лә ул. Ҡатын-ҡыҙ башы менән фәйләсүф! Ғөмүмән, фәйләсүф булмай ижадсы ла булып булмайҙыр, ә Гөлсирәлә фәйләсүфлек бигерәк тә күҙгә бәрелеп тора. Алығыҙ шул уҡ «Күңел йорто» повесын... Ундағы Буранбайға афған ҡомлоғонда дәрүиштең өгөтнәсихәт туҡыуы: «Үткәндәргә илткән күперҙәрең ҡалһа, тотош емер. Булған һәм уҙып киткәндәрҙән азат бул. Кешегә иң мөһиме: хәҙер һәм бында» ... «Сағыштырма. Кешенең бар бәләләре ана шул сағыштырыуҙан башлана: минең динем — иң дөрөҫө, минең халҡым — иң бөйөгө... Йәғни мин һинән өҫтөнөрәк...» «Бары тик көсһөҙҙәр, ихтыярһыҙҙар, тик ҡурҡаҡтар ғына әҙәм көтөүе ихтыяры менән йәшәй. Ә һин асылыңда ҡал...» «Ағымға ҡаршы йөҙмә — бер ваҡытта ла етә, еңә алмаҫһың. Йылға менән бергә һал кеүек аҡ, осраған бар ләзәтте таты, һәр матурлыҡҡа күҙҙәрең һөйөнһөн: ағастар һәм йондоҙҙар, тыуып килгән таңдың ыуыҙ ғына алһыулығы, сәскәләр һәм йылға... хатта бәләкәй генә йылға ла океанғаса барып етә: ағымға ҡушылһаң, мәғәнәһеҙ көрәшкә үҙеңдең көсөңдө сарыф итмәҫһең».



Ы с ы н  т р а к т а т, уҡыусы ләззәт кисерә. Ысынлап та, Гөлсирә — фәйләсүф. Бының шулай икәнен беҙ элек тә, бергә уҡығанда ла, үҙ-ара әңгәмәләшеүҙән дә беләә инек, хәҙер ижадсы шуны ижадында файҙалана алды. Икенсе яҡтан, шау трактат нәфис әҙәбиәттең асылына ҡаршы ла килә бит, уҡыусыны ялҡыта. Бында әҙиптән фәлсәфәүи ҡатламды урынын белеп, самалап әҫәр туҡымаһына тәбиғи һеңдереү маһирлығы ла талап ителә. Ә Гөлсирә бөгөн ошо һәләткә эйә! Ҡасандыр уйһыҙ йөрөгән яндырай тәбиғәтле Буранбай бөгөн, афған яуын үткәс, фәйләсүфкә әйләнгән, йәй, сабыр... Ҡасандыр көрәшкә талпынып торған зат бөгөн уй уйлай йәки уй ағасы олонона йәбешеп, башын баҫып ултыра... Гөлсирә тәрән кисерештәргә ҡойоноп тасуирлаусы психолог, ул яндырай Буранбайҙың фәйләсүфкә әйләнеү тарихын бәйән итә.

Әҙиптәр кеше психологияһын асыу өсөн төрлө алымдар ҡуллана, персонаждарҙы төрлө хәл-ваҡиғалар ҡойонына ташлай. Гөлсирәләр быуыны афған яуын үтте, шуға был тема әҙибә ижадында ҙур урын биләй. Йәнә, Гөлсирә традицион, классик проза вәкиле генә түгел, ул «Шоңҡар» түңәрәгенә йөрөгәндә атағанымса, романтизм, символизм, хатта декадент әҙәбиәте вәкиле. Мәҫәлән, уның хикәйәһендә афған яугирының йәне — төп герой. Йәки әҫәр туҡымаһында тере кеше һәм уның йәне хәрәкәт итә (хикәйә ике планда, ике ваҡыт арауығында, хатта параллель бара). Таңсулпан Ғарипова ише, Гөлсирә лә символдарға иғтибарлы, шул уҡ ваҡытта унан айырмалы рәүештә, мистиканы, теге донъя хәл-әхүәлдәрен һүрәтләүҙән дә айбанмай. «Баһадир» хикәйәһендә ысынбарлыҡ менән әкиәт ҡатыша, уҡыусы шанҡып ҡала, бисәнең көрәшсе булыуына ышанмай.

«Күңел йорто» әҫәренә әйләнеп ҡайтһаҡ, был әйбер — әҙибәнең күңел тибрәнеүе, илаһи бер йыры, ыҙалы уйланыу емеше ул. Фәлсәфәүи, психологик, шул уҡ ваҡытта шиғрәнә повесть, бөгөнгө башҡорт прозаһына матур, танһыҡ бер өлөш! Киләсәктә уның иштәре лә тыуыр, сөнки прозаиктың ғәҙәттә бер йәки ике генә шәп әйбере булып бөтмәй. Ижадсы нисек бар — шулай яҙа, йәки алтылағы — алтмышта. Ижадсының бар әҫәрҙәренә лә башлыса йә талант, йә талантһыҙлыҡ билдәһе генә һуғылған була.

## ФАНТАСТ
### (Фәниҙә Исхаҡова)

Башҡорт прозаһы киләсәктә фантистик әҙәбиәт йүнәлешендә лә үҫер төҫлө. Уның ярсыҡтарын, яралғыларын беҙ XX быуаттың икенсе яртыһында ла күрҙек. Әлбиттә, бөтә әҙәбиәт (булмышы менән) ул фантастика, экиәт; тик прозалағы был үҙаллы йүнәлеште лә инҡар итмәйек.

Ҡыйыу һәм өмөтлө фантастарыбыҙҙың араһында Фәниҙә Исхаҡова исеме лә бар. Ул «Кеше-күсермә» фантастик романынан, «Таң алдынан ҡайтырмын» повесынан, «Бүрегә һунар» хикәйәһенән торған матур йыйынтыҡ әҙерләне (Өфө, 1996 йыл, «Китап» нәшриәте). Тәүҙән үк шуны әйтке килә: эйе, әҙибә ҡыйыулығы, сәмлелеге менән һоҡландыра. Ҡоласлы, оҙон тынлы ижадсы булмаҡсы ул. «Булыр бала бишегенән...» тиҙәр, Фәниҙә лә уҡыусыларҙы етди романы менән, ынтылышлы ижады менән һөйөндөрҙө.



Уның фантастикаһы, башлыса, үткән быуаттағы фәнни фараздарға нигеҙләнә. Мәҫәлән, «Кеше-күсермә»ләге төп герой Айварҙың игеҙәге-күсермәһе була. Ул, бәлки, геройҙың тәненән айырылыусы йәнелер, бәлки, информацион-энергетик ҡулсалыр? Астраль игеҙәк! Ул ысын Айвар булып йөрөй, эшләй, ашай... Бәлки, ул Айварҙың тәненән айырылған игеҙәгелер, Айварҙың шәүләһелер? Төп герой эшенә барһа, бында әле генә уның игеҙәге булған, һөйгәненә инһә, Гөлүзә: «Беҙ әле генә хушлашҡайныҡ та инде, Айвар», — тип тора... Төп герой Айвар ирекһеҙҙән игеҙәге артынан йөрөргә, төрлө мажараларға тарырырға мәжбүр. Башта ул игеҙәген тапҡыһы килә, аҙаҡ Асраровтан бының һәләкәткә илтеүен белә... Иң һуңынан Айвар астраль игеҙәге — дөрөҫөрәге, йәне-рухы менән идара итергә өйрәнә һәм ысынбарлыҡтағы йүнһеҙ бәндәләргә ҡаршы, яуызлыҡҡа, хаслыҡҡа ҡаршы көрәшкә сыға. Тик бәндә яуызлығы алдында астраль игеҙәк-рух та көсһөҙ... Ахыр сиктә автор уҡыусыға, ерҙә кешенең рухы, уның тураһындағы иҫтәлек — хәтер генә мәңгелек, тип белдерә. Айварҙың йәне тәненән айырыла; ул йән тәнгә кире ҡуна алмай ҡала, сөнки кешеләр йәне ваҡытлыса ғына айырылып торған шул тәнде тамаша ҡыла... Ә был тыйыла! Ләкин бәндәләр тән менән рух араһындағы тылсымлы күперҙе аяуһыҙ рәүештә емереп үтә... Тәненә әйләнеп ҡайтҡан йән, бәндәләрҙән, яуызлыҡ-хыянаттан өркөп, мәңгелеккә ашыға.

Фәниҙә Исхаҡова, әлбиттә, традицион классик прозабыҙ вәкиле түгел, ул, әлбиттә, яңы йүнәлештәге ижадсы... Башҡорт әҙәбиәтендә яңы быуатта бындай яңылыҡтар үҙенә нисек юл ярыр? Бөгөнгө уҡыусы уны ҡабул итерме? Фәниҙә шул уҡ традицион формаларҙы ҡуллана, әүәлге-мәңгелек төҙөлөш материалы башҡорт теле... Бары йөкмәтке, фекерҙе уҡыусыға еткереү юлдары, әҙәби саралар яңы... Әйткәндәй, нишләптер бөгөнгө йәш быуын әҙиптәребеҙ русса фекерләп яҙа. Был, бәлки, фәндең русса үҫешенән, беҙҙең йәмғиәттә күп өлкәләрҙә эш итеү русса алып барылыуынан киләлер?

Фәниҙә Исхаҡованың «Кеше-күсермә» романы, һис шикһеҙ, әҙәбиәтебеҙҙә яңы күренеш, һөйөнөслө яңылыҡ. Мәҫәлән, Зәйни Ихсановтың «Йәшәргән ҡарттар» фантастик романынан («Ағиҙел» журналы, 1996 йыл, №5) айырмалы рәүештә, ерле матери-

алға нигеҙләнгән. Яҙыусы-фантастан бары һүрәтләүен йәнлерәк, тәбиғиерәк итеүҙе, геройҙарҙың кисерештәрен ихласыраҡ тойҙороуҙы теләйһе ҡала. Йәғни әҫәр фантастика тип аталһа ла, тормошсанырак, һүрәтләүе йылыраҡ, геройҙар әҙәмсәрәк булһын ине. Әҫәрҙә теге боевиктарҙағы, бестселлерҙарҙағы шикелле манекен, роботтар ғына хәрәкәт итмәһен! Был — шәхси теләктәр генә, бәлки, беҙҙең, традицион проза вәкилдәренең фантастиканы аңламаулығы? Бөгөнгө балалар, бигерәк тә ҡаланыҡылар, нәҡ шундай әҫәрҙәргә йығылып ята түгелме? Был — заманалар, зауыҡтар, уҡыусының һәм әҙәбиәттең үҙенең яңырыуы-үҙгәреүеме? Был үҙгәреү-яңырыу яҡшығамы?

Шәхсән үҙемә килгәндә, әҙибәнең «Бүрегә һунар» фантастик хикәйәһе оҡшаны. Бының сәбәбе, бәлки, авторҙың аңлы рәүештә ысынбарлыҡ менән уйҙырманы бутауындалыр? Һунарсы Ғиндулла уңарса үҙе кеше лә, шул уҡ ваҡытта инә бүрегә лә әүерелеүсе кәләш менән йәшәп ята. Ошо ҡыҙыҡлы сюжет төйөнө уҡыусыны «бөрөп» ала: уҡыусы һиҫкәнеп китә, үҙен әйләндереп алған тәбиғәткә, йәмғиәткә иғтибарлыраҡ, диҡҡәтлерәк була башлай. Кеше, ғөмүмән, хыялый зат... сәнғәттең дә бер сере — хыял менән ысынбарлыҡты бутауҙа, шаштырыуҙа-ҡабартыуҙа, ошо нигеҙҙә ҡыҙыҡлы ассоциациялар уятыуҙа. Автор, сәнғәт кешеһе, сәнғәттең ошо асылын тойоп эш итә, уҡыусы күңелендә ҡыҙыҡлы хис-тойғолар уята, тормошҡа яңыса, яңы юҫыҡтан «ҡарата».

Фәниҙә Исхаҡова, эйе, фантаст, шулай ҙа ул реалистик пландағы әҫәрҙәр ҙә яҙып ҡараһа, яңы, икенсе киңлектәргә лә сыҡһа ине, иманым камил, ул был тарафтарҙа ла уңышҡа юлығыр.

## ТЫЛСЫМ ИЛЕ
### *(Фәрзәнә Акбулатова)*

Минең рухи донъямда уның да тылсымлы иле бар, һәм мин нисәмә йылдар инде шул илдең серҙәрен асам, уның тылсымына, моңдарына һоҡланып йәшәйем.

«Атай икмәге», «Серле туҫтаҡ», «Туғайҙарҙа турғай», «Остаз һәм Нәркәс», «Таш ҡәлғә йәки киләсәккә сәйәхәт», «Ҡорбанлыҡ...», «Тәгәрмәс ҡала»... Эйе мин уның ижадын күҙәтә киләм, үҫеш баҫҡыстарын һанайым. «Мин тынлыҡты тыңланым» Ниһайәт, «Уның исеме — Мөхәббәт», «Ҡан», «Йондоҙҙар ҡойолдо нур булып»...



Фәрзәнә Аҡбулатова, минеңсә, әҙәбиәткә ҡоштай талпынып килеп инде, ниндәйҙер әҙерлек осорон үтеп тә торманы, хәҙер ҙә бик тә юғарыла оса. Хатта уның артынан күҙәтеп күҙҙәр ҡамаша, күҙҙәр йәшкәҙәй... Фәрзәнә үҙенең сихри иленә илтә уҡыусыны. Ундағы яралы күңелле кешеләр ҙә («Һомайғош ҡанатлы ҡош була»), хатта сабыйҙар ҙа («Толпар ҡанатлы була»), мөхәббәттән уңмаусы, әммә уны бәхет тип атауҙан туймаусы заттар ҙа бар (« Мин тынлыҡты тыңланым»). Был ил, әлбиттә, бәхет иле генә түгел, шау сәскәләрҙән генә тормай, унда һуғыш, аслыҡ һулышы ла, инештә ғашиҡтарҙың һыу сәсрәтешеп шаярыуы ла, йәш әсәнең балаһыҙлыҡтан һыкрап күҙ йәш түгеүе лә, оянынан ҡыуылған бисара эттең шыңшыуы ла ҡолаҡҡа салынып ҡала. Башлыса Фәрзәнә мөхәббәт темаһын күтәрә, ир менән ҡатын мөнәсәбәтен яҡтырта, көнкүреш картиналарын яҙа. Шул уҡ ваҡытта уға һуғыш һәм тыл, сәйәсәт һәм фән мәсьәләләре лә ят түгел.

Дәүерҙәр алмашыныу, йәһәт кенә фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күсеү, хыял менән ысынбарлыҡтың аралашыуы Фәрзәнә прозаһының айырым һәм мөһим бер сифаты. Йәнә был уның өсөн булмышты художестволы һынландырыуға булышыусы сара ла. «Остаз менән Нәркәс йәки фанилыҡтағы хыял» хикәйәһе лә, исеме үк әйтеп тороуынса, геройҙың хыялын һүрәтләүгә ҡоролған. Остаз фанилыҡта ла, хыял илендә лә йәшәй, ул хыялын, үҙ асылын эҙләй. Автор бында ла халыҡтың

ауыҙ-тел ижадындағы образдарҙы, һүрәтләү саралары яңыса файҙалана, әҫәр туҡымаһына йәтеш кенә индереп ебәрә. Хикәйә бай һәм һутлы тел менән яҙылған, халыҡтың йыры-уйы, фантазияһы менән һуғарылған. «Атай икмәге» хикәйәһе Фәрзәнәне етди психолог итеп танытһа, нәҡ «Остаз менән Нәркәс»е әҙибәне шағирә итеп танытты! Ысын прозаик ысын шағир ҙа ул тип һанайым мин.

«Таш ҡәлғә»лә төп герой дәүерҙән дәүергә күсеп йөрөй. Бөгөнгөнән үткәнгә үтә, киләсәккә бара... Эйе, Фәрзәнә Аҡбулатова, яңы быуын вәкиле булараҡ, прозабыҙға яңы һулыш өрөүселәрҙең, уны яңы алымдар, һүрәтләү саралары менән байытыусыларҙың береһе булды. XX быуаттағы прозабыҙ башлыса традицион классик реализмға нигеҙләнде, — бөгөн беҙ бер үк әҫәрҙә ысынбарлыҡ менән уйҙырманың буталыуын, геройҙың бер замандан икенсеһенә күсеп йөрөүен, төш менән өн аралашыуын, геройҙың йәки уның йәненең, тәненән айырылып, сәйәхәт итеүен күрәбеҙ. Быны үрҙә телгә алынған яңы быуын әҙибәләрҙең бөтә әҫәрендә лә осратабыҙ. Был — яңылыҡ, яңырыу һәм әҙәбиәтебеҙ офоҡтарының киңәйеүе лә...

«Мин тынлыҡты тыңланым». Быны Фәрзәнәнең тәүге реалистик повесы тип нарыҡлаһаҡ та була. «Ҡорбанлыҡ...» та, «Тәгәрмәс ҡала» ла фантастик планда яҙылған, башлыса аллегорияға, фантасмагорияға ҡоролған... Фәрзәнәнең башлыса хикәйәсе булыуын алда әйтә биреберәк үткәйнек. Шунлыҡтан ул һәр деталгә, әҫәрҙәге һәр картинаға иғтибарлы. Персонаждары ла берәгәйле, иҫтә ҡалырлыҡ. Ысын хикәйәсегә хас булғанса, Фәрзәнә күп һүҙлелеккә, геройҙың үткәнен йә башынан кисергәнен тотошлай һөйләп сығыуға юл ҡуймай. Уның һәр детале, һәр ваҡиға-картинаһы сюжет үҫешенә булыша, автор әйтергә теләгән төп фекергә буйһондорола.

«Мин тынлыҡты тыңланым»да авторҙың оҫталығы үҫә барыуына, художниктың тормоштоң төпкөл ҡатламдарына тәрәнерәк үтеп инеүенә шаһит булабыҙ. Фәрзәнәнең тәүге күп әйберҙәре романтик, аллегорик юҫыҡта яҙылһа, әле ул бәндә яҙмыштарын нығыраҡ аса, тормоштоң — бәндә мөнәсәбәттәре тәбиғәтенең эсенәрәк үтеп инә. «Атай икмәге» лә, «Серле туҫтаҡ» та, «Остаз менән Нәркәс» тә күберәк автор-геройҙың уй-кисерештәрен һүрәтләүгә ҡоролһа, тормош бында зәңгәрһыу селтәр аша бирелһә, «Мин тынлыҡты тыңланым»да ысынбарлыҡ бер ниндәй «селтәр»һеҙ ҡаршыбыҙға баҫа.

Камила... уның Ғәзинурға мөхәббәте... Камила яҙмышы... Бәндәләрҙең был донъяла бәхет тип йәшәүе... Тәүҙә автор фабуланың иң ҡырҡыу мәлен бирә, йәки әҫәрҙе-сюжетты шулай ҡырҡыулаштыра, мәлде актуалләштерә. Шунан һүрәтләү фабуланың башына ҡайта. Артабан композиция эҙмә-эҙлекле хикәйәләү буйынса төҙөлә. Шунан йәнә теге кульминацияға етәбеҙ һәм... сиселеш. Эйе, башта бөтәһе лә һәүетемсә бара. Кинәт Ғәзинур, һөйөклөһө Камиланан айырылып, башҡаға өйләнә. Беренсе тетрәү. Ете йыл үтә һәм — икенсе тетрәү. Камила кейәүгә сыға. Ә Ғәзинур, туйҙы боҙоп, һөйөклөһө ҡаршыһына баҫа. Камила ла, Ғәзинур ҙа бер-береһе өсөн өҙөлә... Тик туй һәм Камила икенсегә кейәүгә сығырға тора... Хәтәр кульминация! Хистәр, кисерештәр бәрелеше! Бәндәнең инде иң хәтәр һынау алдына баҫыуы! Камила тормошондағы иң мөһим мәл!

Әҙибә тормоштағы һәүетемсә генә үҫешкән ваҡиғалар теҙмәһенән бер тылсым (изюминка) таба белә. Нәҡ ошо тылсым — символ һуңынан сюжет ҡороусы фекергә йә үҙәккә әйләнә. Беҙ, һүҙҙең тоҙо, хәбәрҙең тоҙо нимәлә, тип һөйләйбеҙ. Йәки әҫәрҙең дә тоҙо-тылсымы була. Шунһыҙ сюжет, әҫәр юҡ. Ул, бәлки, әҫәрҙең идеяһылыр, йә пафосылыр, йә символдыр? «Уның исеме — Мөхәббәт» хикәйәһендә — ҡәҙимге ваҡиғалар теҙмәһе, ләкин ижадсы ҡырҡыу бер мәлдә төп героиня Фируза ауыҙынан әхирәте Гөлирәгә ошондай һүҙҙәр әйттерә: «Ул мине уттан алып һыуға һалды. Ул мине, күккә атып, йондоҙ яһаны ла ҡапыл, юғарынан үрелеп алып, ергә быраҡтырҙы...» — «Кем ул?» — тип һорай Гөлирә. Гөлирә, әлбиттә, Фирузаның иренең, алдаҡсы һөйәркәһенең исемен атауын көтә, ә Фируза: «Уның исеме — Мөхәббәт!» — ти. Фәрзәнә Аҡбулатованың шиғриәт иле сағыу буяуҙарға бай, ул төрлө, серле ауаздарҙан туҡылған. Уның ҡайһы ҡылына тейһәң дә, сыңлай, ҡайһы биҙәгенә ҡағылһаң да, күҙҙәр ҡамаша. Был шиғриәт иле берсә алһыу томандар ҡосағы һымаҡ һынлана, берсә ул шишмә сылтырауы та-

рата, берсә ул әкиәт тарафына оҡшап ҡала, берсә ул һуғыш тылына, берсә яңғыҙ Камиланың яңғыҙ өйөнә алып ҡайта.

Фәрзәнә Аҡбулатованың ижад донъяһы үтә лә нескә хисле, әҫәрҙәре лә, билдәле, күңелдәрҙең нескәргән, ялanғасланған сағында тыуғандыр; шул уҡ ваҡытта был үтә лә интеллектуаль, юғары зиһенлы донъя, шиғриәтле проза һәм интеллектуаль проза. Алайыҡ һуңғы «Йондоҙҙар ҡойолдо нур булып» хикәйәһен. Ниндәй хистәр дауылы, фекерҙәр бәрелеше! Медицина фәндәре докторы Маһира Калиевна психоаналитик, радио тулҡындарында тура эфир аша (йылдар аша) үҙенең юғалтҡан мөхәббәте менән осраша. Кешеләргә өгөт-нәсихәт бирә, ә үҙ яҙмышы... Көтмәгәндә һөйөклөһө Нурислам, уны белмәй, эфирҙа бәйләнешкә инә. 25 йылдан һуң! Беренсе тетрәү.

— Һин күккә, йондоҙҙарға ҡара, — тип өйрәтә радиопсихоаналитик Маһира ханым элекке ире Нурисламды. Йәки Нурисламға бынан 25 йыл әүәл шул уҡ Нурислам уның үҙенә әйткән һүҙҙәрҙе ҡайтарып ҡабатлай: — Күңел сикһеҙлек менән осрашырға тейеш, шуға ла — ул күңел. Ҡасан йондоҙҙар беҙгә үҙ серен сисеүҙән туҡтай? Үҙебеҙгә үҙебеҙ ышанмай башлағас!

Автор уҡыусы алдында ғәҙәти ваҡиғалар теҙмәһен теҙә кеүек. Был тәү ҡарашҡа ғына шулай. Ысынында иһә ул ваҡиға-деталде әҫәргә уйлап «индерә», әҫәрҙә һәр деталь «уйнай», төп идеяға «хеҙмәт итә». Хатта Нурислам менән тура эфирҙа һөйләшкән арала, диалогтар араһында Маһира Кәлиевна уйҙары, үткәнен хәтерләүе, һыҙланыуы-икеләнеүҙәре «бирелә». «Эйе, башта ҡапма-ҡаршы ике тойғо көрәште. Яҡтыһы еңде. Ул хыялында яңы Нурисламды тыуҙырҙы. Унының өҫтөнә йондоҙ бөртөктәре һипте». Һәм шул Маһира Кәлиевнаның башына етә лә: икенсе тетрәү!

Наил Ғәйетбайҙың «Дүрт кешелек табын» тигән интеллектуаль драмаһы бар. Бер ҡарағанда, ул камерный әҫәр тойғоһо ҡалдыра, ләкин унда ниндәй ҡисерештәр, фекерҙәр тәрәнлеге!.. «Йондоҙҙар ҡойолдо нур булып» интеллектуаль хикәйәһен дә шул драма менән сағыштырырға мөмкин.

Минең рухи донъямда, Фәрзәнә, һинең дә тылсым илең бар, һәм мин нисәмә йылдар инде шул илдең серҙәрен асам, унының тылсымына, моңдарына ҡойоноп йәшәйем.

# ЗАМАНАЛАР ҺУЛЫШЫН ТОЙҘОРОУСЫ

## *(Айһылыу Йәғәфәрова)*

Әҙиптәр менән әҙибәләрҙе бер ниндәй ҙә айырып ҡарау булырға тейеш түгелдер тип уйлайым. Дөрөҫөрәге, уларҙың әҫәрҙәренә байҡау яһағанда бер ниндәй ҙә «өҫтәү» йәки «кәметеү» булырға тейеш түгел! Шулай ҙа әҙибәләр, мәҫәлән, этнографик деталдәрҙе нескәрәк бирә, улар, минең ҡарамаҡҡа, заман һулышын нығыраҡ тойҙора. Айһылыу Йәғәфәрованың ике китаптан торған «Килендәр» романы бар. Әлбиттә, композицияһы тарҡау, буталсығыраҡ, сюжет динамикалы үҫешмәй, шулай ҙа Айһылыу үҙе һуғыштан һуң тыуған бала булһа ла, һуғыш осорондағы тыл күренештәрен ҡайһылай оҫта һүрәтләй,шул заманды ҡалай нескә тойҙора!

Ир-ат заты эре алымлы, ә ҡатынҡыҙ нескә. Ир бала күберәге олатай тирәһендә урала, «ваҡ» әйберҙәргә, «көнкүреш» ваҡиғаларына бик илтифат итеп тә бармай, ә ҡыҙ бала иғтибарлы, хисле, һәр әйберҙе тоя, кисерә белә. Өләсәй ҙә телсәрерәк, боронғоно хәтер һандығында оҙағыраҡ та, ҡәҙерләберәк тә һаҡлай, йомарт: бик йомоп та бармай, яйы һайын аса һала — ейәнсәренә һөйләп-һамаҡлап йөрөй. Эйе, өләсәй ҡашындағы ҡыҙ бала күберәкте ишетә, халыҡ йолаларын, дәүерҙе, көнкүрештe нығыраҡ белеп-тойоп үҫә. Айһылыу ҙа тылдағы тормошто, халҡыбыҙ көнкүренеш өләсәйҙәренән өйрәнгәндер. Телебеҙ, моңобоҙ һандығы бит улар — шуны ла күңеленә һеңдергәндер бала.

Айһылыу Йәғәфәрова башта балалар шағирәһе булараҡ танылды, бәләкәйҙәр өсөн биш-алты китап сығарҙы. Ҡайһы бер әҫәрҙәре башланғыс класс уҡыусылары өсөн дәреслектәргә индерелде.

«Эйәрҙә ҡалды егет» повесы. «Ауыл халҡы уларҙы ҡыҙыҡһынып күҙәтте: йә ҡапҡанан берәй баш күренеп ҡала, йә тәҙрә ҡорғаны күтәрелә, йә малайшалай велосипед менеп, һаулыҡ һорашып, алдынан үтеп китә, ҡарттар текмә буйында бүрәнә өҫтөндә ултыра». Ауыл картинаһы күҙ алдына баҫа. «Ағас карауаттағы ҡабарып торған оло-оло мендәрҙәр түбәгәсә өйөлгән, Бибинур



әбей үҙ ҡулдары менән һуҡҡан сағыу биҙәкле келәмдәр, иҙәнгәсә түшәлгән аҫалы балаҫтар, төҫлө еп менән һырып сигелгән өҫтәл ашъяулыҡтары инеүсенең күңелен күтәреп ебәрә». Бындай этнографик деталдәрҙе әҙибәләр генә тотоп алалыр ул! Уларҙың тилбер ҡулы, нескә һиҙемләүе мөғжизәләр тыуҙыра. «Бибинур әбей ҙә ҡала кешеләре араһында заманса күренергә тырышты: үҙе әйткәнсә, магазин күлдәге кейҙе, йоҡараҡ яулыҡ ябынды, хатта көрән сейә муйынсағын да тағырға онотманы».

«Килендәр»ҙән айырмалы рәүештә, был повесында Айһылыу Йәгәфәрованың стиле, хикәйәләүе йыйнаҡлана, теле тилберләнә төшкән. «Эйәрҙә ҡалған егет» әҫәренең композицияһы ла теүәл, конфликт ҡырҡыуыраҡ. «Килендәр» романындағы һымаҡ, әҙибә уҡыусыға заман һулышын тойҙора. Бөгөнгө көн итмешебеҙ, туҡһанынсы йылдар ҡаршыбыҙға ап-асыҡ килеп баҫа. Ялған демократтарҙың илебеҙгә күрһәткән «игелеге» яҙыусының күңелен дә әрнетә. Автор әленән-әле халҡыбыҙҙың үҙ ирке өсөн көрәше сәхифәләренә мөрәжәғәт итә, тарихтағы батырҙарҙы терелтә. Повесть сюжеты башҡорт ауылына Мәскәүҙән кино төшөрөргә юлланған Иван Петрович командаһын, уның ауыл кешеләре менән аралашыуын күрһәтеүҙән ғибәрәт. Киносценарийҙағы Ҡараһаҡал бур, илбаҫар имеш. Ул үҙ шайкаһы менән урыҫ сәйәхәтселәренә һөжүм итә... Ә бөгөнгө ауыл кешеләре үҙҙәренең халыҡ батыры Ҡараһаҡал менән ғорурлана, уға арналған йырҙары, бейеүҙәре бар... Иван Петрович ахырҙа сценарийҙы үҙгәртергә мәжбүр: урыҫ сәйәхәтселәрен атҡа менгән башҡорт ҡыҙҙары уратып ала.

Ҡәҙимгесә сюжетҡа йәнлелек индереүсе сюжет һыҙығы килеп инә. Бала сағында Иван Петрович немец концлагерына эләгә, аҙаҡ бер байҙа эшләй — уны Ильяс исемле һалдат ҡотҡара. Хатта малайҙы пулянан күкрәге менән ҡаплай... Шул Ильяс олатай киносылар төшкән ауылда йәшәп ята икән! Тулҡынландырғыс осрашыу, башҡорттоң ҡунаҡсылығы, урыҫ кешеләренә итәғәтлек күрһәтеүе... Ысынлап та, Айһылыу Йәгәфәрова ике халыҡ дуҫлығына дан йырлай! Ирекһеҙҙән шундай һорау тыуа: бөгөнгө урыҫ әҙиптәренән берәйһе башҡорт тураһында, дуҫлыҡ хаҡында ошолай яҙамы икән? Эйе, Айһылыу Йәгәфәрованың сәсмә әҫәрҙәре заман һулышын тойҙороуҙары, ғәжәйеп картиналар тыуҙырыуҙары менән ҡиммәт. Ауыл күренешен, тыл осорон, йәйге эштәрҙе, уйындарҙы әҙибә ҡайһылай сағыу, күренмәлекле итеп тасуирлай: «Бейеп арып, таңда ғына, юлда ятҡан кәзәләрҙе өркөтә-өркөтә, өйгә ҡайтабыҙ. Ишек асыҡ, ҡарттар йоҡо һимертә. Киске һалҡын һөттө һемерәбеҙ ҙә йылғаға һыу төшөргә йүгерәбеҙ. Туғайҙа — томан, үләндә — ысыҡ, һыу — һыуыҡ... Вәт, йәшлек, эй...»

Эйе, Айһылыу матур-матур картиналар тыуҙыра, теле лә һығылмалы... Әйтеүемсә, «Эйәрҙә ҡалды егет» повесында стиле тағы ла йыйнаҡлана, үткерләнә төшкән. Автор бында беҙҙең замандың сетерекле сәйәси-социаль мәсьәләләрен күтәрә. Әленән-әле үткәндәге осорҙар менән бөгөнгөнө сағыштырып бирә. Йәки үткән менән бөгөнгө араһында күпер һала. Бөгөнгө мөстәҡиллек яулауыбыҙ, килешеүҙәр төҙөүебеҙ Иван Грозный менән төҙөгән килешеүҙең дауамы, тип әйтә әҙибә. Беҙҙең оло тарихыбыҙ бар, тамырҙарыбыҙ тәрәндә. Шуға беҙҙең киләсәгебеҙ бар, тигән ышаныс белдерә.

## ТӘҮГЕ МӨХӘББӘТ
### *(Мәрйәм Буракаева)*

Мәрйәм Бураҡаева китаптары менән танышҡас, башҡа ҡыҙыҡ ҡына уй килде: ниңә беҙ, прозаиктар, торабара хикәйә яҙыуҙы ташлайбыҙ? Ижадыбыҙҙың инеш башы булған шул хикәйәләр һағындыра. Уларҙа — беҙҙең иң мөҡәддәс хистәребеҙ, иң хыялый күңел осоштарыбыҙ... Беҙ әленән-әле уларға әйләнеп ҡайтырға, шул осорҙағы формаларҙы, илһамлы аһәнде иҫкә төшөрөргә, үҙебеҙҙең бөгөнгө ижадыбыҙҙа файҙаланырға тейешбеҙ бит. Иманым камил, бының файҙаһынан башҡа зыяны булмаҫ



ине! Һәм шуныһы ғәжәпләндерә: бәғзе бер ижадсыларҙың башланғыс ижады артабанғыһынан көслөрәк тә булып сыға... Ә беҙ шул хикәйәләргә, бәләкәй, әһәмиәтһеҙ жанр типме икән, ҡул һелтәп киткәнбеҙ — тәүге һөйөүебеҙҙе юғалтҡанбыҙ. Ғәҙәттә был «хыянатты» тәүге һөйөү ҙә, бөтөн ижад та киләсәктә ғәфү итмәйәсәк.

Миҫал өсөн, уҡыусының күҙ алдына баҫһын өсөн, был тәңгәлдә мин Ғәлим Хисамов, Роберт Байымов, Динис Бүләков, Тайфур Сәғитов һ.б. ижадын атай алам. Ижад шишмәләре башында ниндәй хикәйәләр яҙа ине улар! Һуңынан тәүге һөйөүҙәренә хыянат иттеләр. Әллә хикәйә — йәшлек аһәңе генәме, аяныслы яҙмышлы тәүге мөхәббәте генәме?

Мәрйәм Бураҡаеваның «Көҙгө ысыҡ» (1991) йыйынтығына ингән тәүге хикәйәләрен дә иҫ киткес ләззәт менән уҡыным мин, айырыла алманым, теленә, шиғри аһәңенә һоҡландым. Эйе, Мәрйәм Бураҡаева ижадын өп-өр яңынан астым үҙемә. Беҙ башлыса Мәрйәм апайҙы «экологик» повестар яҙыусы, методист-уҡытыусы, «Тормош һабаҡтары» дәреслеге авторы тип беләбеҙ, ә ул — хикәйәсе икән...

Эйе, уның хикәйәләре — шиғри нәҫерҙәр, улар бер кемдекенә лә оҡшамаған. Минеңсә, Мәрйәм Бураҡаеваның бөтә художестволылыҡ һәләте — ошо әҫәрҙәрендә. «Көҙгө ысыҡ» хикәйәһе — үҙе шиғыр, мин уның ситенә «мөхәббәт поэмаһы» тип сыймаҡлап та ҡуйғанмын. «Таң еле бул — тәҙрәне асырмын, моң булып кил — йырыма ҡушырмын, ләйсән булып яу — ялан аяҡлап, сәстәремде туҙҙырып ҡаршыларmын тамсыларыңды». Әҙибәнең теле халыҡсан (йәки ул халыҡ телен халыҡҡа ҡайтара) : «Һауытын тотоп ҡына ашаттығыҙмы? Ҡуңыр̧ҡайым инәһе кеүек ығыш, туйҙымы икән?» Әҙибә ауыл ҡатыны характерын да оҫта бирә: « Бына иҫәр, — тип шелтәләне Шәмсиә үҙен-үҙе ҡайтып барышлай. — Ете ят ир эргәһендә ни тип ҡыҙара-бүртенә баҫып торам һуң, сәскә һөйләп. Әҙәпһеҙ».

«Һөйгән йәр бер була» хикәйәһендә Тәнзиләнең Ғайсаға булған һөйөүе һушты ала. Эйе, ошо илаһи мөхәббәт хаҡында уҡығанда тамаҡтар кибеп китә. Ғайса — сирле, ә Тәнзилә — йәш. Ғайса үҙ хәлен белә, тик Тәнзилә уйынан ҡайтмай... Ә ғүмере осонда Ғайса: «Һин үкенмәйһеңме? Мин һине аҙ ғына булһа ла, бәхетле итә алдыммы?» — тип һорай Тәнзиләнән. Тәнзилә яңғыҙ булһа ла үткәндәренән илһам алып йәшәй. Мәрйәм Бураҡаева геройҙары —шундай хыялый, хисле, хәтерле заттар. Уларҙа ни саҡлы рух көсө бар!

«Ай ҡояштан нурҙар ала» хикәйәһендә бейеүсе Ғәйшә, бейеп пенсияға сыҡҡас, ауылына ҡайта. Ҡала кешеһенә элекке һөйөклөһө Нурлығаяздың ҡыланыштары ла ят һымаҡ; ләкин Ғәйшә ауылға ғына түгел, «ғәмһеҙ йәшлегенә, алһыу таңдарға, айлы төндәргә, шаян Инйәргә, табандар зыулағансы бейегән уйындарға ҡайтҡан...»

Мәрйәм Бураҡаева хикәйәләре ябай сюжетҡа ҡоролған, уларҙа мажара, шаҡ ҡатырғыс боролоштар, интригалар юҡ, бары шиғриәт кенә. Шуныһы менән уҡыусыны арбай, әсир итә.

Әҙибә әле күп ваҡытын йәмәғәт эшенә сарыф итә. Башҡорт мәктәптәре өсөн «Тормош һабаҡтары» дәреслеге ижад итте. «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге, «Аҡ тирмә» клубы эшен ойоштороусыларҙың береһе булды, башҡорттоң 1988-1995 йылдарҙағы яңы күтәрелеше уртаһында ҡатнаша. Милли хәрәкәттә ҡатнашыуы ла Мәрйәм апайҙың тынғыһыҙ тәбиғәтенән килә булыр. Мин эшләмәһәм, был эште кем эшләр, халҡым ихтыяжын беҙ ҡайғыртмаһаҡ, кем... тип яна тоғро йөрәк. Дан уның был фиҙакәр ҡаһарманлығына! Һуңғы ваҡытта яҙыусы «экологик повестар» — «Шишмә», «Аҡ балыҡ»ты яҙҙы. Уларҙа тыуған йәнтөйәктең сафлығын һаҡлау мәсьәләләре ҡуҙғатыла. Ә «Һүнмәҫ йондоҙҙар» повесы геологтар тормошо тураһында. Дөйөм алғанда, был өс повесты шартлы рәүештә «производство әҙәбиәте» тип нарыҡларға ла мөмкин.

Тойомлауымса, «Һүнмәҫ йондоҙҙар» әҫәре әҙибәнең һөйөклө ире, билдәле ғалим Диҡҡәт Бураҡаевҡа арналған, шуға ул ихлас килеп сыҡҡан да... Тәүге һөйөү онотолмай ул! Ә хикәйә — башҡорт прозаһының йөҙөк ҡашы, иң «мөхәббәтле» жанры бит.

## МИҺЫРБАНЛЫ ИЖАД

### (Нажиә Игеҙйәнова)

Әҙибәләр ижады менән ныҡлап таныша башлағас, тағы бер ҡыуаныс кисерҙем. Ул — үҙем өсөн Нажиә Игеҙйәнова донъяһын асыу,унының төҫбиҙәктәренән ләззәт, фәһем алыу һәм был хаҡта уҡыусыға һөйөнсөләү теләге тыуыу. Әҙибәнең «Көндәш» китабына иғтибар итәйек.

Арала оҫта ҡәләме менән яҙылған ысын сәнғәт әҫәрҙәре бар бит! «Көндәш», «Бәпес туйы», «Ветерандар», «Баһа», «Ҡамғаҡ», «Мулла», «Өҙөлгән моң» хикәйәләре ... Халыҡсан образдар, ысын тормош күренештәре, йәнле телмәр...

Теүәлбай ҡарсығы Шәүрәгә: «Бәпәй еҫен туйғансы еҫкәп ҡайтырбыҙ», — ти хикәйә аҙағында. Ул ғүмер баҡый күңеленән үҙ бәпесен күрмәүенә ҡарсығын битәрләп йәшәй. Эйе, һуңынан ғына асыҡлана эш... Автор үҙ әҫәрендә геройҙарын тормоштарының иң ҡырҡыу мәлдәрендә һүрәтләй, ошо мәлдә уларҙы тотошлай «асылырға» мәжбүр итә. «Көндәш»тәге Ғәлимә лә яңғыҙ йәшәүҙең ни тиклем хәтәр икәнен ире Ҡәнзәфәр үлгәс кенә аңлай. Шунда ғына ул әхирәте Гөлбаныуҙы ғүмер буйы битәрләп, иренән бушҡа көнләшеүенә төшөнә... Донъя фани, ә беҙ бер-беребеҙҙе буштан-бушҡа ҡырып-бысып алып барабыҙ. «Баһа»лағы колхоз рәйесе Сабит та донъяға һыймай йәшәй, көсһөҙҙө ҡыйырһыта, яратмаған кешеләрен ауылды ташлап китергә мәжбүр итә. Ә уңарса үҙенә ике аҙым ер етте. Ауылдаштарҙың гәзел баһаһы — ҡәбер ҡаҙырға кеше лә табып булмай, тәбиғәттең ҡаты хөкөмө — көнө лә урамда эт тотҡоһоҙ!

Нажиә Игеҙйәнова хикәйәләрендә изгелек иң юғары ҡиммәт, кешенең ихласлығы, гәҙеллеге — иң оло күңел бейеклеге. Әҙибә үҙ геройҙарын ошо юҫыҡтан тороп тасуирлай, ошондай бизмәнгә һалып үлсәй. Унын кешеләргә талабы, бер ҡараһаң, әллә ни ҡаты ла түгел кеүек, әммә бында хыянат, ҡырағайлыҡ, күңел хилафлығы ғәфү ителмәй.



Һикһәненсе йылдар уртаһында Дыуан-Мәсетле ауыл сәхнәһендә һәүәскәрҙәр скетч сәхнәләштерҙе. Эскесе ҡатындар... Авторын да иғлан итмәнеләр, шай. Тамашасы йығылып ятып көлә, бәғзеләр үҙҙәренән-үҙҙәре көлә. Йәнәһе, драматург шаштырған! Әле килеп шул скетчты Н. Игеҙйәнова китабынан уҡып ултырам. Көлөп эсем ҡатып бөттө. Ул «Стаканым буталлы» тип атала икән.

Ыстаканым буталлы,<br>
Уң ҡулыңа тот әле,<br>
Йырлап биргән зәм-зәмемде<br>
Ҡылҡылдатып йот әле!

Шундай әкәмәт сатираға, нескә юморға маһир беҙҙең әҙибәбеҙ. Был, бәлки, унын «Һәнәк» журналында эшләүенән дә киләлер? «Ҡарун», «Иркә ҡунаҡ» юмористик хикәйәләре... Хәҙер Нажиә Игеҙйәнова «Ағиҙел» журналында эшләй. Күберәк етди хикәйәләр, повестар яҙа... Етди тигән «Орҡоя-Анна», шул уҡ «Баһа» әҫәрендә лә ниндәй юмор!

Нажиә Игеҙйәнова әҫәрҙәрендә — халыҡсан тормош картиналары, халҡыбыҙың йәнле һөйләү теле. Бәлки, ошо һыҙаттар, ошондай маһирлыҡ, унын хикәйә, повестарының йәнелер? Бәғзе бер әйберҙе уҡыйһың... Бөтәһе лә бар... Сюжет та ҡойоп ҡуйған кеүек, композиция төҙөк, теле лә арыу, ә әҫәрҙең йәне юҡ... Быны нисек аңларға, сәбәбен нисек аңлатырға? Мөмкин түгел! Быны тойорға ғына, һиҙемләргә генә мөмкин... Йәне юҡ, йәки әҫәр уҡыусы күңелен тибрәндермәй, йәки ундағы геройҙар йәнһеҙ, картиналар боҙло. «Тәҡдир» повесы әҙибәнең оло уңышы булды, тип икеләнмәй әйтә алабыҙ. Йәнле картиналар, тере образдар, ысын тормош... Ә теле, теле һуң... Фатима әбейҙең ха-

лыҡсан теле... Бәләкәс кенә ҡыҙый Нәжибәнең күңел донъяһы... Ваҡиғалар уның исеменән беренсе заттан һөйләнелә. Бала күҙлегенән баһалана ололар донъяһы. Был әҫәргә лирик йылылыҡ, романтик аһәң бирә. Шул уҡ ваҡытта тышта — тыл күренештәре, тыштағы тормош һине «һығып» ала... Үҫмер ҡыҙ бала малайҙар урынына ат егә, утынға бара. Автор, күрәһең, әсәһенең бала сағын яҙғандыр... Ә мин ниңәлер бында уның үҙенең бала сағын күрҙем. Төп героиня — авторҙың үҙе, уның күҙ ҡарашы. Бер яҡтан ҡарағанда, был тәбиғи ҙә. Сөнки һәр әҫәрҙә төп герой — ул автор, уның ниндәйҙер бер яғы сағыла.

«Мин иңбаштарымды һикертәм: исем аташмай Нәрисә сыҙармы ла, уны туҡмамай мин түҙерменме. Белмәйем, белмәйем...»

Бала теле. «Ҡарсыҡ! Шул ҡәҙәре сәйхур булырһың икән, ошо баштан!» — тип әйтеүҙән ҡурҡып ҡына тәгәсемде түңкәрҙем».

Нажиә Игеҙйәнова, үҙе әйтмешләй, ҡәртнәһе, әбеһе йәнәшендә, ошо тел маһирҙарының телен үҙенә һеңдереп үҫә... Хәҙер ул халыҡтан алғанды халыҡҡа ҡайтара. «Бына бер йәймә еләк ҡағы, быныһы — баландыҡы. Үҙең дә эс... Ашаһаң балан, ауырымаҫһың балам, тип йыйғайныҡ былтыр. Быйыл да уңған, йәрингә балан ҡағы булыр тағы». «Тәҡдир»ҙән бихисап миҫалдар килтерергә мөмкин. Нәҡ халыҡтың йәнле телен белеүе авторҙы әҙибә итә. Әҫәрҙәрҙең ышандырыу көсөн арттыра. Бындай телле әҫәрҙәрҙе, бындай йәнле халыҡсан тел менән һөйләшеүсе геройлы әҫәрҙәрҙе ысындан да халыҡсан әҫәрҙәр тип атарға ярайҙыр.

Әйткәндәй, Нажиә апай — минең яҡташым. Төньяҡ-көнсығыштан. Беҙҙең яҡтың ошондай танһыҡ һүҙҙәрен уҡығас, күңел тулышып китә. Беҙҙең әйле һөйләше һүҙҙәрен әҙәби телгә индерә Нажиә апай. Ә был — әҙәби телебеҙҙең бөтмәҫ-төкәнмәҫ хазинаһы, әле асылмаған яҡҡылығы... Әлеге көнгәсә ул әҙәбиәтебеҙҙең ысын үҙ байлығына әүерелмәгән!

«Ҡәртнәйем әллә ни асыуланмай ғына орошҡан була», — тип белдерә бәләкәс Нәжибә. Был телде әҙибә үҙенең стиленә һеңдерә.

Стиль тигәндәй. «Тәҡдир»ҙә бала теле өҫтөнлөк итһә, «Көндәш»тә Ғәлимә ҡарсыҡ теле, ә «Ҡамғаҡ»та ситтә күп йөрөп үҙ яғында яҡҡа әйләнгән Ҡадир — төп хикәйәсе. Хикәйәселәрҙең кем булыуына, йәки материалға (йөкмәткегә) ҡарата тәғәйен генә тел-стиль, интонация (форма) һайлап алына.

Был ҡыҫҡа ғына байҡауҙа «Өҙөлгән моң» хикәйәһенә лә туҡталып уҙыу кәрәктер, тим. Беҙ эскелек хаҡында, уға ҡаршы көрәш рухында яҙылған күп әйберҙәрҙе уҡығаныбыҙ бар. «Өҙөлгән моң»да иһә эске яман бер сир итеп һүрәтләнә. Эске — күңел һәм тән сире. Автор бында ҡоро нотоҡ һөйләргә тотонмай, эскесе Райханға ҡаршы күҫәк тә күтәрмәй... Райхан — ҡорбан, Райханды ул йәлләй. Уны ире Сәйетгәрәй ҙә йәлләй: «Ерҙә ятып һалҡын тейҙерәһең, әсәһе. — Ул ҡатынының сәсен һыйпаны...» Был кешелә ниндәй оло йөрәклелек! Был әҫәрҙә ниндәй тәрән гуманизм йомолған! Бәлки, шул гуманизм хаҡына әҫәр яҙылалыр, шул гуманизм менән әҙәбиәт кешелеккә кәрәктер. Шул гуманизмда әҙәбиәттең бөтә ҡиммәтелер!

Юҡ, Сәйетгәрәй эскегә һабышҡан бисәһен — элекке врач Райханды ғәйепләмәй, ул уны иҫереп-аунап ятҡан еренән күтәреп-бәпләп йөрөтә, юҡ, һүкмәй, ә йәлләй... Әҙибә лә үҙ героиняһына — шул эскесегә, хәтәр сиргә тарыған затҡа мәрхәмәт менән баға... Аңлай уны! Һәм уҡыусыларына ла:

— Донъяға һеҙ миһырбанлы күҙҙәрегеҙ менән бағығыҙ, кешеләр! — тип өндәшә кеүек.

Ошондай гуманистик әҫәрҙәр яҙғанығыҙ өсөн, ошондай гуманистик әҙәбиәтебеҙҙе тыуҙырышҡанығыҙ өсөн, рәхмәт һеҙгә, башҡорт әҙибәләре!

Шундай әҙибәләре, батыр ҙа, матур ҙа, оһолло ла вәкилдәре булған бөгөнгө башҡорт прозаһы киләсәкһеҙ була тиме ни инде! Ир ижадсылары булдыра алмағанды әҙибәләре булдыра, ирҙәр ҡырылып бөткәндә, йә илен яҡлай алмағанда, ил инәләре күтәрелә... Юҡ, телебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе, прозабыҙҙы кәмһетергә юл ҡуймаҫ башҡорт әҙибәләре! Халҡымдың ғәййәр йөрәкле мадонналары!